**МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ**

**Министерство образования и науки Республики Башкортостан**

**отдел образования Баймакского района**

**МОБУ ООШ с.Верхнетавлыкаево**

РАССМОТРЕНО
методическим объединением учителей
____________

Протокол № 1
от 28.08.2023г.

СОГЛАСОВАНО
заместитель директора по УВР
____________Утябаева А.А.

УТВЕРЖДЕНО
директор школы
____________ Имамбаев Р.Р.

Приказ № 54.1
от 29.08.2023 г.

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА
# УЧЕБНОГО ПРЕДМЕТА
# «ЛИТЕРАТУРНОЕ ЧТЕНИЕ НА РОДНОМ ЯЗЫКЕ»
# ДЛЯ 1–4 КЛАССОВ НАЧАЛЬНОГО ОБЩЕГО ОБРАЗОВАНИЯ

**С.Верхнетавлыкаево 2023**

**Эш программаһының йөкмәткеһе**

1. Эш программаһының бөтә курсына аңлатмалы яҙыу:

- Норматив документтар
- Уҡыу методик ҡулланмаларын һайлау
- Предметтың уҡыу планындағы урыны

2. Предмет өйрәнеүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре
3. Уҡыу предметының йөкмәткеһе
4. Баһалау критерийҙары

## 1.Аңлатма яҙыу

**Норматив документтар**

Дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен туған тел булараҡ өйрәнеү буйынса программа Федераль дәүләт стандарттарында ҡуйылған талаптар , һөҙөмтәләр, түбәндәге норматив–хоҡуҡ документтарына нигеҙләнеп төҙөлдө:

1. Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының бойороғо менән № 373, 06.10.2009, үҙгәрештәр менән бойороҡ №1241, 26.11.2010; үҙгәрештәр менән бойороҡ №1576, 31.12.2015.
2. Рәсәй Федерацияһының “Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында” Федераль законы 29.12.2012 №273 - ФЗ;
3. Башҡортостан Республикаһының”Башҡортостан Республикаһының Мәғариф тураһында” законы 01.07.2013 №696 - З;
4. ”Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” законы 25 октябрь 1991 №1807

-1 (24.07.98, 11.12.2002 йыл үҙгәртелгән);

5. ”Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында” законы 15.02.1999йыл №216 - З;
6. Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы 31.12.2009 йыл №УП - 730.
7. 2020-2021 уҡыу йылына мәктәптең уҡыу планы,приказ № 1/14 01.09.2020
8. Ҡаҙмаш урта мәктәбенең эш программаһы һылтанмаһына таянып эшләнә.

**9.** Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған Башланғыс дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәренең башланғыс кластары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса өлгө программалар. Авторҙары Сынбулатова Ф.Ш., Дәүләтшина М.С. , Мәүлийәрова Ә.Т.

**10. Уҡыу методик ҡулланмаларын һайлау**

11. Әҙәби уҡыу предметы түбәндәге уҡыу әсбаптары ярҙамында башҡарыла**:**

**1 класс** Әҙәби уҡыу (Сынбулатова Ф.Ш. һ.б.) Өфө «Китап»-2017, «Әҙәби уҡыу” дәреслегенә эш дәфтәре.

**2 класс** «Туған тел» Өфө “Китап – 2017 ( Дәүләтшина М.С.. һ.б.) «Әҙәби уҡыу” дәреслегенә эш дәфтәре.

**3 класс** Әҙәби уҡыу китабы (Сынбулатова Ф.Ш. һ.б.) Өфө «Китап» -2017. «Әҙәби уҡыу” дәреслегенә эш дәфтәре.

**4 класс** Әҙәби уҡыу китабы (Сынбулатова Ф.Ш. һ.б.) Өфө «Китап» -2017. «Әҙәби уҡыу” дәреслегенә эш дәфтәре. (Сынбулатова Ф.Ш. һ.б.)

**Предметтың уҡыу планындағы урыны**

Эш программаһы 4,3,2 кластарҙа 68 сәғәткә ( аҙнаға 2 сәғәт), 1 класта 33 ( аҙнаға 1сәғәт)

**2.Предмет өйрәнеүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре.**

Уҡытыусы баланың уҡыу материалдарын үҙләштереүҙә яһаған һәр аҙымын, эш төрҙәрен башҡарыуҙағы оҫталығын күҙәтә, күрә һәм уларҙы баһалай. Заман психодидактикаһына талаптарына ярашлы, бала эшен, эшмәкәрлеген анализлап, уның һөҙөмтәлелеген үҙе баһалап өйрәнергә тейеш. Уҡыусының үҙ аллылыҡҡа, йәғни аҡыл менән баҙнатлы эш итеүгә һәр ынтылышын ваҡытында күрә белеү, эш ысулдарын, алымдарын дөрөҫ йүнәлештә ҡулланылыуына баһа биреү һәм бындай баһалау эшенә уның үҙен күнектереү ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки үҙаллылыҡ – тормошта иң кәрәкле сифат.

Башланғыс класс уҡытыусыһы үҙ алдына баланы өс кимәлдә үҫтереү бурысын аныҡ ҡуя.

**Шәхси үҫеш кимәле**

Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының ҡиммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.Был йүнәлештә башланғыс мәктәп уҡыусыһына уҡыуҙың һәм белем алыуҙың мөһимлеген, үҫеш әсен кәрәклеген аңлатырға, китап уҡырға ғәҙәтләнеү, ҡыҙыҡһыныу теләген булдырырға; үҙ-үҙеңде һәм тормошто аңлауҙы сығанаҡ итеп ҡабул итергә, тарихи-мәҙәни ваҡиғаларҙы, кешелек ҡиммәттәре менән әҙәбиәттәге айырым сәнғәт төрө икәнен белергә өйрәтергә кәрәк. Әҙәби әҫәрҙәрҙе тулыһынса һәм эмоциональ ҡабул итеү үҙ фекереңде булдырыуға һәм әңгәмәсенекен хөрмәт итеү талаптарына яуап бирә. Уҡыусыларҙа формалаштырылған түбәндәге сифаттар әҙәби уҡыу предметын өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып тора:

-Тыуған илгә, уның теленә, мәҙәниәтенә, тарихына һөйөү һәм хөрмәт

-төрлө ситуацияларҙа йәштәштәре һәм ололар менән хеҙмәттәшлек күнекмәһе, конфликтлы һәм бәхәсле ситуацияларҙан сығыу юлын белеү

-әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү

-хислелек, әҙеңдең хис-тойғоларыңды аңлай һәм билдәләй белеү

-башҡа кешеләрҙең хис –тойғоларын аңлай һәм билдәләй белең, уртаҡлаша алыу

-матурлыҡ тойғоһо- тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш

-нәфис һүҙҙең матурлығын тоя белеү, үҙеңдең телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу

-ғаилә ҡиммәттәрен аңлау, үҙеңдең яҡындарыңа ҡарата ихтирам, рәхмәт, яуаплылыҡ тойғолары

-текст авторы менән диалог ҡороуға ҡыҙыҡһыныу, уҡыуға ихтыяж

-үҙеңдең һәм әйләнә-тирәңдәге кешеләрҙең ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү

-мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсе этик тойғолар-намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып, ғәфү үтенеү.

**Метапредмет кимәле.**

Әҙәби уҡыу предметының дөйөм (метапредмет)һөҙөмтәләре булып, универсаль уҡыу эшмәкәрлеген (УУЭ) формалаштырыу тора

Универсаль эш төрҙәренә өйрәтеү: танып белеү, регулятив һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ алла уҡыуға, белем алырға өйрәтеү.

Көйләүсе УУЭ:

-дәрестен темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы әйтә белеү;
-уҡытыусы менән берлектә уҡыу проблемаһын сисеүҙен планын төҙөү;
-ҡуйылғ маҡсатҡа ирешеү өсөн планды тормошҡа ашырыу.

Танып – белеү УУЭ:

-текстағы мәғлүмәттен бөтөн төрҙәрен дә иҫәпкә алыу;
-уҡыу төрҙәрен маҡсатҡа ярашлы файҙаланыу;
-һүҙлектәр менән файҙалана белеү;
Фекерләй белеү.

Коммуникатив УУЭ:

-телмәр ситуацияһына ярашлы үҙенден фекеренде телдән әйтеү һәм яҙма формала бирә белеү;
-телмәрҙен диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
-үҙенден фекеренде башҡаларға еткерә алыу;
-башҡаларҙы ла ишетә һәм тынлай белеү һәм һораүҙар бирә белеү.

Предмет-ара һөҙөмтәләр түбәндәге талаптарҙан тора:

- әҙәбиәттән, фәнни-популяр мәҡәләләрҙән, белемде арттырырҙай материалдарҙы, кәрәкле мәғлүмәтте таба алыу;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлау (тексты өлөштәргә бүлеү, план төҙөү, тасуирлау сараларын таба белеү) һәм текстың төп фекерен асыҡлау;
- үҙеңдең фекереңде, уйыңды әңгәмәсеңә еткерә алыу;
- тирә-йүн, тәбиғәт менән гармонияла йәшәү ҡағиҙәләрен, ысулдарын үҙләштереү;
- йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү;
- аңлы анализлау эшмәкәрлеген булдырыу;
- төркөмдәрҙә эшләүҙең әһәмиәтен аңлау һәм уларҙа эшләү тәртибен үҙләштереү.

**Предмет кимәле**

Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны анализлау һәм ҡулланыу әлкәһендә тейешле тәжрибә туплау.

Әҙәби уҡыу курсының предмет һөҙөмтәләре булып түбәндәге күнекмәләрҙең формалашыуы тора;

- компетентлы уҡыуҙы формалаштырыу;
- уҡыу техникаһын үҙләштереү;
- уҡылған йәки тыңланған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлау алымдарына эйә булыу;
- интерпретацияның төп элементтарын үҙләштереү;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе, фәнни-популяр уҡыу текстарын анализлау һәм үҙгәртеү күнекмәләренә эйә булыу;

- үҙеңде ҡыҙыҡһындырған әҙәбиәтте үҙ аллы һайлай алыу;
- һүҙлектәр, белешмәләр менән эш итә белеү;
- үҙеңде ижади эшмәкәрлеккә һәләтле, белемле китап уҡыусы итеп тойоу;
- монологтар төҙөү, текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү;
- һүрәтләү, хикәйәләү, хөкөмләү элементтарын индереп, бәләкәй текстар төҙөү;

-шиғырҙарҙы яттан һөйләү һәм таныш булмаған аудиторияла сығыш яһау күнекмәләренә эйә булыу.

-әҙәбиәттең дөйөм һәм милли мәҙәниәтте сағылдырыусы күренеш булыуын, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, традицияларҙы һаҡлау һәм быуындан быуынға еткереү сараһы икәнлеген аңлау

-уҡыуҙың шәхси үҫеш өсөн әһәмиәтен аңлау, Тыуған ил һәм уның кешеләре, тирә-яҡ донъя тураһында хәбәрҙәр булыу

-уҡытыусы , уҡыусылар башҡарыуында текстарҙы тыңлап ҡабул итә белеү

-аңлап, дөрөҫ, тасуири итеп ҡысҡырып уҡыу

-текстың исеменә, авторҙың фамилияһына, иллюстрацияларға, терәк һүҙҙәргә ҡарап уның йөкмәткеһен күҙаллау

-таныш булмаған тексты эстән уҡыу, һүҙлек эшен үткәрә белеү

-тексты өлөштәргә бүлеү, ябай план төҙөү

-текстың төп фекерен үҙ аллы билдәләй белеү

-текстан геройҙы ҡылыҡһырлаусы материалды таба белеү

-тексты тулыһынса һәм һайланма һөйләй белеү

-геройға ҡылыҡһырлама бирә белеү

-телдән һәм яҙма һүрәтләй белеү

-уҡыу барышында картиналарҙы күҙ алдына килтереп һөйләй белеү

-уҡылғанға ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү, нимәнең ни өсөн оҡшағанын аңлата алыу

-асыҡланған билдәләре буйынса әҫәрҙәрҙе хикәйә, повесть, пьеса жанрҙарына бүлә белеү

-проза әҫәренә геройҙы, авторҙы һәм һөйләүсене айыра белеү

-нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы, йәнләндереүҙәрҙе күрә белеү

-уҡылған әҫәрҙәрҙә авторҙы, геройҙарҙы һәм әҫәрҙең исемен дөрөҫ атау

Программаға ингән уҡыу өсөн бирелгән текстар 1-сенән алып 4-се класҡа тиклем күләме яғынан яйлап үҫә барыу тәртибендә бирелгән, һәр класс өсөн уҡыу текстары баланың психик һәм физик үҫешен иҫәпкә алып һайлап алынған. Уҡыу өсөн текстар һайлағанда, бигерәк тә 6-10 йәшлек балалар психологияһына хас булған үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алыу зарур. Был йәштәгебалаларҙың күңел ҡылдарын тирбәтерлек эмоциональ характерҙағы, сағыу сюжетлы, уларҙың булмышына, үҙҙәре йәшендәге балалар тормошона хас булған ситуация, хәл-ваҡиғаларға бай булған сюжетлы әҫәрҙәр индерелде.

1-се класс программаһына индерелгән «Атай - ғаилә башлығы», «Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр» бүлектәрендә шиғыр, әкиәт,' хикәйәләр баланы уратып алған яҡын кешеләре: атай, әсәй,

ҡартатай, ҡартәсәй, олатай, өләсәй, ағай, ҡусты, апай, һеңлеләре тураһында. Шулай итеп, балаға был текстар ярҙамындаетеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләре бирә башлайбыҙ. Ошондай текстарҙың балаға тәрбиәүи йоғонтоһо ла көслө. Уҡытыусы улар ярҙамында туғанлыҡ хистәрен тағы ла тәрәнерәк тойорға, уғандарына иғтибарлы, яғымлы, ярҙамсыл булырға өйрәтә. Мәҙәниле шәхестең төп күрһәткесе, тәрбиәлелектең төп эстәлеге - туғандарыңа булған юғары мәҙәнилек. Уҡытыусы ошоноһыҙыҡ өҫтөнә алып, ентекле тәрбиәүи эш алып барырға бурыслы.

1-се класс «Туған тел»енең «Матурлыҡ донъяһына сәйәхәт» бүлеге етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәләрен үҫтереү, хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү, уның идея-тематикаһын асыҡлау, йөкмәткеһен текстка яҡын итеп һөйләп өйрәнеү һәм тасуири уҡыу кеүек күнекмәләрҙе формалаштырыуға ҡоролған булырға тейеш.

- Башланғыс мәктәп алдына ҡуйылған яңы талаптар нигеҙендә программала телмәр эшмәкәрлеген әүҙемләштереүгә иғтибар көсәйтелгән. 3-4-се класс программаһында күләмлерәк әҫәрҙәр уҡыу ҡаралған һәм башланғыс мәктәпте тамамлауға оптималь уҡыуға ирешеү, үҙ фекереңде логик яҡтан эҙмә-эҙлекле, асыҡ, дөрөҫ итеп һөйләй һәм яҙа белеү күнекмәләре булдырыу күҙ уңында тотола.

- Уҡыусы 2-се класты тамамлағанда үрҙә күрһәтелгән шәхси, метапредмет, предмет һөҙөмтәләренең уҡыусыла формалашыуы-формалашмауы баһалана. Балала индивидуаль прогресс булыу-булмауы ҡарала.

- Төрлө контроль төрҙәре ҡулланыла. Һәр бер дәрестә тексты уҡыу, йөкмәткеһен һөйләү (тулы, ҡыҫҡаса), тасуири уҡыу үткәрелә. Яҙма эштәр ҙә булырға мөмкин (һорауҙарға яуаптар, геройға ҡылыҡһырлама), тест (һөйләмде тамамла, дөрөҫ яуапты билдәлә, хатаны тап,...). Һәр бүлекте тамамлағандан һуң тематик контроль (йомғаҡлау дәресе) үткәрелә. Ул телдән йәки яҙма, конкурс, ярыш, уйын формаһында булырға мөмкин. Сирек һайын уҡыу темпы тикшерелә. 2-се класс аҙағына ул минутына 50-55 һүҙ булырға тейеш.

- Предмет буйынса башланғыс дөйөм белем биреүҙен йөкмәткеһе.

Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлегенен төрҙәре.
Тынлау,тынлау һәм аңлау.
Уҡыу.
Ҡысҡырып уҡыу.
Этән уҡыу.
Төрлө тектар менән эш.
Әҙәби әҫәрҙен тексы өҫтөндә эш.
Әҙәби тексты һөйләүҙен төрлө төрҙәрен – тулы, һайлап, ҡыҫҡартып һөйләүҙе үҙләштереү

Башланғыс кластарҙа әҙәби уҡыу дәрестәрендә телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәренә лә (һөйләү, тыңлау,уҡыу, яҙыу) өйрәтеү маҡсатлы рәүештә ҡыҙыу темпта бара. Һөйләү, тыңлау, уҡыу һәм яҙыу күнекмәләрен тейешле кимәлгә ҡуйыу- уҡытыусының төп бурысы. Был күнекмәләргә тулыһынса эйә булған уҡыусы ғына урта звенола уҡыуын уңышлы дауам итәсәк. Кешенең һөйләгәнен иғтибар менән тыңлай белгән, әңгәмәләшеүсеһе менән мәҙәниәтле һөйләшеү ҡора алған, етеҙ һәм аңлы уҡырға күнеккән, уй- фекерҙәрен грамоталы яҙа алған уҡыусы ғына урта звенола уҡырға әҙер.

Юғарыла бәйән ителгән күнекмәләрҙе формалаштырыуҙа уҡыу(туған тел) дәрестәре төп ролде уйнай.

Уҡыу дәрестәренең төп маҡсаты – китап уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу, уҡыу техникаһын камиллаштырыу, балаларҙы китап уҡыуға ылыҡтырыу, һөйләү һәм аралашыу телмәрен үҫтереү, үҙ аллы ижад итеүгә мөмкинселектәр, шарттар булдырыу.

Был мөһим бурыстар программаға индерелгән материалдар, донъя һәм башҡорт әҙәбиәтенән һайланып, художестволы һәм фәнни-популяр текстар, шулай уҡ халыҡ ижады әҫәрҙәре ярҙамында ғәмәлгә ашырыла.

**4 -се класты тамалаған уҡыусының белем һәм уҡыу күнекмәләренә ҡуйылған талаптар.**
Уҡыусы **өйрәнә:**
-әҙәби һөйләү нормаларын күҙәтеп, йылдан-йыл аңлы, дөрөҫ, тасуири уҡырға,
-әҫәрҙе эстән аңлы уҡый белергә,
-уҡылған әҫәрҙең темаһын һәм төп фекерен билдәләргә,
-уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләргә, әҫәрҙең исемен, авторын белергә, авторҙың уй-фекерен асыҡларға,
-уҡылған әҫәрҙең йөкмәткеһен тулы, ҡыҫҡартып, һайлап һәм ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға,
-уҡылған әҫәрҙе мәғәни яҡтан тамамланған өлөштәргә үҙ аллы бүлергә, улар араһынан төп фекерҙе белдергәнен таба белергә, хикәйәнең, мәҡәләнең планын төҙөргә,
-әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә уҡыусының шәхси уй-фекерен, ҡарашын белергә,
-әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылығын, холҡон, тәртибен, тойғоһон, уй-фекерен аңларға, уларҙы бер-береһе менән сағыштырырға, үҙ мөнәсәбәтеңде белдерергә, ҡылыҡһырлама төҙөй белергә,
-шиғырҙы, ауыҙ-тел ижады өлгөләрен тасуири, яттан һөйләй белергә,
-төрлө тематикаға уҡылған әҫәрҙәргә миҫалдар килтерә белергә

-тирә-йүнде өйрәнгәндә туған тел дәресенең тотҡан урынын һәм ролен төшөнөү, уҡыуҙың мәҙә-ниәтле кеше тәрбиәләүҙәге ролен аңлау, шәхси сифаттарҙы һәм социаль ҡиммәттәрҙе тәрбиәләү;

-әҙәбиәттең дөйөм кешелек сифаттары тәрбиәләүҙәге әһәмиәтен аңлау;

-әҙәби текстар өҫтөндә эстетика һәм әхлаҡ күҙлегенән сығып эш итеү;

-әҙәбиәттең сәнғәттең бер төрө икәненә төшөнөү, аңлау;

-әҙәби жанрҙы билдәләү, геройға характеристика биреү өсөн анализлау, сағыштырыу алымдарын ҡулланыу; тексты һөйләй белеү күнекмәләренә эйә булыу;

үҙеңә кәрәкле информацияны әҙәби, фәнни-поппуляр, өйрәтеү текстарынан таба белеү;

энциклопедик, белешмә баҫмалар менән эшләү күнекмәләренә эйә булыу.

**өйрәнергә мөмкинселек ала:**
*-китаптың өлөштәрен, йәғни титул битен, йөкмәткеһен, инеш һүҙен, йомғаҡ һүҙен табыу, һылтанмаһын, аннотацияһын айыра белергә,*
*-үҙ аллы төҙөлгән планға таянып, әҫәрҙең йөкмәткеһен ентекләп,ҡыҫҡартып йәки һайлап,ижади һөйләү күнекмәһенә эйә булырға,*
*-уҡылған тексттың йөкмәткеһенә нигеҙләнеп, ҡыҫҡа хикәйәләр төҙөргә, яҙырға,ижади эштәр башҡарырға, автор ҡарашынан сығып, уның төп геройына баһа бирә белергә,*
*-фольклор әҫәрҙәренә миҫалдар килтерә белергә.*

## 3. Уҡыу предметының йөкмәткеһе

**Телмәр һәм уҡыу эшмәкәрлегенең төрҙәре**
Тыңлау, тыңлау һәм аңлау.
Телдән һөйләнгән телмәрҙе (әңгәмәсенең мөнәсәбәтен, һәр төрлө текстарҙы уҡыу) тыңлау һәм ҡабул итеү. Мәғлүмәтте тыңлау һәм мәғәнәһенә төшөнә барыу: уҡыусы һөйләмде тыңлай, һөйләүсенең телмәренә төшөнә, телмәр аша уның мөнәсәбәтен,мәғәнә биҙәктәрен билдәләй, йөкмәткеһенә ҡарата яуабын әҙерләй, ҡылығын, тәртибен планлаштыра, уҡылған фәнни-мәғлүмәти, әҙәби әҫәрҙәр буйынса һорау биреү һәм мәғлүмәт алыу күнекмәләре формалаштыра. Тыңлау һәм аңлай алыу күнекмәләре үҙ аллы айырым ғына формалашмай. Ул һөйләү,яҙыу,уҡыу күнекмәләре менән аралашып, үрелеп бара

**Уҡыу.**

**Ҡысҡырып уҡыу.** Уҡыу күнекмәһенә өйрәткәндә ҡысҡырып уҡыу бик ҙур әһәмиәткә эйә. Ҡысҡырып  уҡыу баланы уҡырға өйрәтеүҙә мөһим урын тота, дөрөҫ, йүгерек, аңлы һәм тасуири уҡыу күнекмәләрен барлыҡҡа килтерә. Әкренләп уҡыу күнекмәһенән аңлап, дөрөҫ, бөтә һүҙҙәр менән ҡысҡырып уҡыуға күсеү (уҡыу тиҙлеге индивидуаль уҡыу темпына ярашлы була), яйлап уҡыу тиҙлеген арттыра. Тексты аңлы үҙләштереү аша йүгерек уҡыу күнекмәләрен булдырыу. Уҡығанда интонацияның йөкмәткегә тура килеүен күҙәтеп, орфоэпик нормаларҙан тайпылмау. Һөйләмдәрҙе, тыныш билдәләренәиғтибар итеп, интонация менән уҡыу. Төрлө типтағы, төрҙәге текстарҙың мәғәнәүи үҙенсәлеген аңлау уларҙың мәғәнәһен интонация ярҙамында  биреү. Башҡорт теленең әҙәби тел нормаларын күҙәтеп, һүҙ һәм фраза баҫымына иғтибар итеп уҡыу

**Эстән уҡыу.** Телмәр органдарының ҡатмарлылығынан тыш, һүҙҙәрҙе әйтмәйенсә, күҙ йөрөтөп, текстың йөкмәткеһен аңлап уҡыу. Был уҡыуҙың тиҙлеген яҡшырта, балала уҡыуға ҡарата яуаплылыҡ тойғоһон арттыра, үҙ аллы уҡырға күнектерә.

- Эстән уҡығанда уҡыусы текстың, төрлө жанрҙарҙағы һәм күләмдәге әҫәрҙәрҙең мәғәнәһен, төп фекерен, уларҙы уҡыу төрҙәрен (өйрәнеү, таныштырыу, һайлау) билдәләй. Текстан кәрәкле мәғлүмәтте таба белеү күнекмәләрен үҙләштерә. Уҡыуҙың төрлө төрҙәрен (фактлау, тасуирлау, тулыландырып уҡыу) аңлауға эйә була.

**Төрлө текстар менән эш**

Төрлө төрҙәге текстар тураһында дөйөм мәғлүмәт биреү.

Әҙәби, фәнни-популяр, өйрәтеү текстарының үҙенсәлектәрен, айырмалығын күрһәтеү, сағыштырыу. Был текстарҙың маҡсатын билдәләү. Фольклор - халыҡ ижады өлгөләре менән таныштырыу, мәғлүмәт биреү.

Тексты һөйләмдәр теҙмәһенән практик рәүештә айыра белеү күнекмәләрен барлыҡҡа килтереү; таныш булмаған китаптарҙың йөкмәткеһен исеменә, тышлыҡтағы һүрәтенә һәм биҙәлешенә ҡарап алдан фаразлау.

Текстарҙың темаһын, төп фекерен, структураһын билдәләү, тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү. Төрлө мәғлүмәт менән эшләү күнекмәләрен булдырыу.

Коллектив фекер алышыуҙа ҡатнашыу, йәғни, текстан файҙаланып, һорауҙарға яуап биреү, тема буйынса сығыш яһау, башҡаларҙың сығышын тыңлау, өҫтәлмә һәм күргәҙмә материалдарҙы, һүрәттәрҙе әңгәмә барышында дөрөҫ ҡулланыу.

**Библиографик культура** - китап сәнғәтенең үҙенсәлекле бер төрө. Китап - белем сығанағы. Рәсәйҙә, Башҡортостанда беренсе китаптар, китап сығарыу (баҫыу), өйрәтеү текстары, әҙәби, белешмә китап төрҙәре тураһында дөйөм мәғлүмәт биреү. Китап элементтары менән таныштырыу: йөкмәтке, иллюстрация. Ғилми, әҙәби китаптарҙа бирелгән мәғлүмәттәр менән таныштырыу. Китап төрҙәре менән таныштырыу. Китап - әҫәр, китап - йыйынтыҡ, иншалар йыйынтығы, матбуғат баҫмалары, белешмә баҫмалар (белешмәләр, һүҙлектәр, энциклопедиялар).

Китаптарҙы тәғәйенләнгән исемлектән картотека буйынса һайлап алыу. Уҡыусының үҙ йәшенә тура килгән һүҙлектәр һәм белешмә материалдарҙы ҡуллана белеүе.

**Әҙәби әҫәрҙең тексы өҫтөндә эш**

Әҙәби әҫәрҙең исеме йөкмәткеһенә тура килеүҙе аңлау, уҡытыусы ярҙамында әҙәби текстың үҙенсәлектәрен билдәләү (телдең тасуирлау сараларын күҙәтеү). Фольклорҙа, йәғни халыҡ ижадында халыҡтың тарихи үҫеш юлында алған тормош тәжрибәһе, аң кимәле, иң яҡшы милли традициялары сағылыуын, ғөмүмән, дөйөм кешелек, әхлаҡ ҡанундары тупланыуын аңлау.
Уҡылған әҫәрҙәрҙең әхлаҡи йөкмәткеһен, геройҙарының үҙ-үҙен тотошон, уларҙың эшләгән эштәрен, ҡылыҡтарын әхлаҡи-мораль күҙлектән анализлау. Изге һәм оло тойғоно - ил тойғоһон төшөнөү. Уҡылған әҫәрҙәрҙә Тыуған илгә һөйөү, ихтирам һаҡлау темаларының төрлө милләт халыҡтары әҫәрҙәрендә сағылыш табыуы (Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтар миҫалында аңлатыу).

Төрлө милләт халыҡтарының фольклорында темаларҙың һәм идеяларҙыңоҡшағанлығы. Телдең тасуирлау сараларын ҡулланып тексты үҙ аллы һөйләү; әҫәрҙең лексикаһын күҙ уңында тотоп, эҙмә-эҙлелек һаҡлау; иллюстрациялар буйынса хикәйә төҙөү һәм һөйләү.
Әҫәрҙәге геройҙарға, телдең тасуирлау сараларын ҡулланып, характеристика биреү. Текстан геройҙы характерлаған һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, әйтемдәрҙе таба белеү. Уҡытыусы ярҙамында геройҙарҙың эш-ҡылығын, уй-теләген анализлау. Геройҙарҙың ҡылығын оҡшашлыҡ буйынса сағыштырыу. Тексты анализлағанда геройҙарға автор биргән характеристика аша яҙыусының үҙ геройына мөнәсәбәтен асыҡлау. ,
Әҫәрҙең геройына характеристика биреү. Геройҙың портретын, характерын ҡылған эштәре, телмәре аша билдәләү.
Әҙәби тексты һөйләүҙең төрлө төрҙәрен - тулы, һайлап, ҡыҫҡартып һөйләүҙе үҙләштереү.
**Тулы һөйләү** - уҡыған тексты ентекләп һөйләү ул: фрагменттың төп фекерен билдәләү, терәк һәм мөһим һүҙҙәрҙе ҡулланыу; эпизодты тулы һөйләү, тексты бүлектәргә бүлеү; һәр бүлектең һәм текстың төп фекерен билдәләү; һәр бүлеккә һәм текстка исем биреү; текстағы атама һөйләмдәрҙе ҡулланып, һорауҙар, әйтемдәр, тулы һөйләмдәр менән план төҙөү күнекмәләре булдырыу.
Бирелгән фрагмент буйынса үҙ аллы һөйләү, әҫәрҙең геройына характеристика (геройҙы һүрәтләгән һүҙҙәрҙе, әйтемдәрҙе, һөйләмдәрҙе һайлау). Ваҡиға урынын һүрәтләү-яҙыу. Текстағы һүрәтләү өсөн кәрәкле һүҙҙәрҙе, әйтемдәрҙе, һөйләмдәрҙе дөрөҫ ҡулланыу. Төрлө әҫәрҙәрҙәге эпизодтарҙы эмоциональ биҙәү, геройҙарҙы ҡылыҡтары буйынса һайлап алыу һәм сағыштырыу.
**Өйрәтеү, фәнни-популяр, әҙәби һәм башҡа текстар менән эшләү**

Әҫәрҙең йөкмәткеһе исеменә тура килеүен күҙәтеү. Өйрәтеү һәм фәнни-популяр текстарҙың үҙенсәлеген билдәләү (мәғлүмәт тапшырыу үҙенсәлеге). Легендалар, риүәйәттәр, ҡобайырҙар, дин тураһындағы текстарҙың дөйөм үҙенсәлектәренә, айырмалыҡтарына төшөнөү. Төрлө текстарҙы анализлау алымдары менән танышыу; сәбәп-һылтау бәйләнештәрен булдырыу. Текстың төп фекерен билдәләү. Тексты тамамланған өлөштәргә бүлеү, бәләкәй темалар билдәләү. Төп һәм терәк һүҙҙәр менән эшләү. Тексты һөйләү алгоритмы, схемаларға таянып һөйләү. Тексты тулы һөйләү. Текст йөкмәткеһенең төп фекерен билдәләп, ҡыҫҡартып һөйләү.

**Һөйләү** (аралашыу мәҙәниәте). Һөйләү, тексты яҙыу кеүек үк, телмәр эшмәкәрлегенең продуктив формаһына инә. Улар икеһе лә фекерләү процесын сағылдырып, билдәле йөкмәтке, текст, информация барлыҡҡа килтерәләр һәм уны башҡаларға тапшырыу функцияһын үтәйҙәр.
**Диалог төҙөү.** Диалогтың телмәрҙең бер төрө булыуына төшөнөү. Диалог ике йәки бер нисә кешенең үҙ-ара һөйләшеүе, фекер алышыуы. Диалогтың (телмәрҙең) үҙенсәлектәре тураһында төшөнсә биреү; бирелгән һорауҙы аңлау, уларға яуап биреү һәм текст буйынса үҙ-ара һорауҙар төҙөү; әңгәмәсене бүлдермәйенсә, итәғәтле формала үҙеңдең фекереңде әйтеп, уҡылған әҫәр (өйрәтеү, фәнни-популяр, әҙәби текстар) буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыу. Әҫәр тураһында башҡаларҙың фекерен белеү. Текстка һәм үҙ тәжрибәңә таянып, үҙеңдең фекереңде иҫбатлау. Һөйләү этикетын дәрестәрҙән тыш шарттарҙа ла иҫтә тотоу, фольклор әҫәрҙәре нигеҙендә этикет үҙенсәлектәре менән танышыу.
Һүҙҙәр өҫтөндә эшләү. Тура, күсмә һәм күп мәғәнәлелек тураһында төшөнсә биреү. Маҡсатлы рәүештә актив һүҙлек запасын тулыландырыу.

**Монолог.** Монолог (һөйләү телмәренең бер формаһы) тураһында аңлатма бирелә. Монологик һөйләү телмәрендә бирәү һөйләүсе, ә ҡалғандар тыңлаусы ролен башҡара. Һөйләү, информацияны тапшырыу процесы әңгәмәгә ҡарағанда киңерәк, тулыраҡ була.
Тәҡдим ителгән темаға һорау яҙыу формаһында, автор тексына тап килерҙәй, монологик телмәр төҙөү. Текстың төп фекерен һөйләү процесында сағылдырыу. Фәнни-популяр, өйрәтеү, әҙәби текстарҙағы үҙенсәлектәргә иғтибар итеп, йөкмәткеһен башҡаларға еткереү. Көндәлек тормоштан сығып, әҙәби әҫәрҙәр уҡыу процесында, һынлы сәнғәт әҫәрҙәре менән танышыу барышында тыуған тәьҫораттарың менән хикәйәләү, бәхәс, хөкөмләү, тасуирлау аша уртаҡлашыу. Әйтергә теләгәндәреңде иҫәпкә алып, үҙ аллы план төҙөү. Фекереңде еткереү барышында монологик телмәрҙең үҙенсәлектәренән сығып, телдең тасуирлау сараларын: антонимдар, синонимдар, сағыштырыуҙарҙы ҡулланыу.

Бирелгән һүрәттәр буйынса уҡылған әҫәрҙәргә, айырым сюжет өлөштәрен файҙаланып, телдән инша төҙөү.

**Яҙыу.** Яҙыу телмәренә эйә булыу - үҙең ишеткән, күргән, уҡыған, кисергән хәл-ваҡиғаларҙы йәки үҙ башыңда тыуған фекерҙәрҙе билдәле маҡсатта һәм ситуацияла тулы, дөрөҫ, эҙмә-эҙлекле, бәйләнешле һәм матур яҙа белеү.
Яҙыу телмәренең үҙенсәлектәре менән танышыу түбәндәге күнекмәләрҙе үҫтереүҙе күҙ уңында тота: әҫәрҙең атамаһы йөкмәткеһенә тура килеп, яҙыу телмәрендә геройҙарҙың ҡылығын дөрөҫ сағылдырыу, телдең тасуирлау сараларын урынлы ҡулланыу; билдәле бер маҡсатты күҙ уңында тотоп, төрлөжанрҙа (хикәйәләү, һүрәтләү, хөкөм йөрөтөү) бәләкәй иншалар ижад итеү; йөкмәткене өҫтәлмә материал менән байытып яҙыу; бирелгән темаға инша яҙыу; баһалама яҙыу.

**Китап уҡыу даирәһе**

Башланғыс мәктәп укыусылары үҙләштерә, ҡабул итә алырлыҡ Рәсәй, Башҡортостан халыҡтарының ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре; XIX-XX быуат классиктарының әҫәрҙәре; сит ил яҙыусыларының әҫәрҙәре менән танышыу. Тарихи, мажаралы, фантастик, фәнни-популяр китаптарҙы, белешмә материалдарҙы, энциклопедик әҙәбиәтте, балалар өсөн тәғәйенләнгән матбуғат сығанаҡтарын таныу, айыра белеү. Балаларға тәҡдим ителгән төп темалар түбәндәгеләрҙән тора: төрлө халыҡтарҙың фольклоры, Тыуған ил, тәбиғәт, йәнлектәр тураһында әҫәрҙәр, юмористик хикәйәләр; йәмғиәтте, тормош-көнкүреште; яманлыҡ, яуызлыҡ, мәрхәмәтлелек кеүек сифаттарҙы сағылдырған әҫәрҙәр.

**Әҙәби-теоретик белем биреү***(практик өйрәтеү)*

Уҡытыусы ярҙамында текстағы тасуирлау сараларының: синонимдарҙың, антонимдарҙың, эпитеттарҙың, сағыштырыуҙарҙың, метафораларҙың, гиперболаларҙың әһәмиәтен билдәләү. Әҫәр геройының портретын, ҡылығын тасуирлау, телмәре, уйҙары тураһында төшөнсә биреү; авторҙың геройға мөнәсәбәтен билдәләү. Һөйләү төрҙәренең композицион үҙенсәлектәре тураһында дөйөм төшөнсә биреү.
*Хикәйәләү* - теге йәки был ваҡиға тураһында хәбәр итеү, һөйләү. *Һүрәтләү* - пейзажды, портретты, интерьерҙы йәки кешенең тышҡы сифаттарын эҙмә- эҙ тасуирлау. *Хөкөмләү* - уҡыусыларҙың билдәле бер кеше ҡылығы, эше буйынса фекер йөрөтөүен, үҙ фекерен иҫбатлауын, дәлилләүен, һығымта яһауын талап итә торған монологик телмәр (геройҙар монологы һәм диалогы тураһында төшөнсә).
Шиғри һәм проза әҫәрҙәрен таныу, айырыу, шиғри әҫәрҙең үҙенсәлектәрен (ритм, рифма) билдәләү. Фольклор һәм автор ижад иткән әҫәрҙәрҙе танып айыра белеү һәләттәренә эйә булыу.
Әҫәрҙәрҙең жанр төрлөлөгө. Бәләкәй күләмле фольклор формаларын (бишек йыры, мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар һ. б.) атау, таный белеү, төп мәғәнәһен асыҡлау.
Хайуандар тураһындағы, көнкүреш, тылсымлы әкиәттәр менән таныштырыу. Әкиәттәрҙең художестволы үҙенсәлектәре (һүҙ байлығы, төҙөлөшө) тураһында дөйөм төшөнсә биреү. Авторы билдәле йәки халыҡ яҙған әкиәттәр менән таныштырыу.
Хикәйә, шиғыр, мәҫәл тураһында дөйөм төшөнсә биреү, уларҙың төҙөлөшөн, тасуирлау сараларын табыу.
Уҡыусыларҙың ижади эшмәкәрлегендә әҙәби әҫәрҙәргә интерпретация биреү. Әҙәби әҫәрҙәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, сәхнәләштереү; телдән һүрәтләү, текстар өҫтөндә эшләгәндә төрлө эш алымдары ҡулланыу ысулдары менән таныштырыу. Хәл- ваҡиғаларҙың тәртибен, эш этабын, башҡарыуҙың эҙмә-эҙлеклелеген тәьмин итеү; инша элементтары менән изложение яҙыу күнекмәләрен булдырыу. Уҡыған әҫәргә оҡшатып, бирелгән иллюстрациялар буйынса һәм үҙеңдең тәжрибәңә нигеҙләнеп текст ижад итеүгә өлгәшеү.
**1 класс ( 33 сәғәт )**
**1 бүлек. Мин уҡый beләм. 7с.**
Өйрәнелгән хәрефтәрҙән торған ҡыҫҡа текстарҙы һалмаҡлап уҡыу. Китап уҡыуға теләк тәрбиәләү. Китап уҡыуға ылыҡтырыу.
**2 бүлек. Әкиәт уҡырға яратам. 7с.**

Әкиәт тураһында төшөнсә биреү. Әкиәтте тасиури уҡырға, тыңларға һәм һөйләргә өйрәтеү. Әкиәттәрҙе сәхнәләштереү.

**3 бүлек. Атай ғаилә башлығы. 7с.**

Ҙур булмаған текстарҙы тыныш билдәләренә ихтибар итеп, бер һөйләмде икенсеһенән айырып уҡыу. Текст өҫтөндә эшләргә өйрәтеү. Яҡын туғандарҙың исем-шәрифтәрен дөрөҫ итеп атарға өрәтеү.

**4 бүлек. Әсәйҙәр һәм бәпәйҙәр. 5с.**

Етеҙ һәм аңлы уҡыу өҫтөндә ентекле эш. Уҡыған текст буйынса фекер алышыу. Йөкмәткеһен һөйләү. Әсәйҙәргә оло ихтирам тәрбиәләү.

**5 бүлек. Матурлыҡ доньяһына сәйәхәт. 7с.**

Етеҙ һәм аңлы уҡыу күнекмәһен камиллаштырыу. Тасиури уҡырға өйрәтеү. Тексты ҡыҫҡартып һөйләргә өйрәтеү.

## 2 класс

Белем байрамы!

**Уҡыйбыҙ ҙа, уйнайбыҙ ҙа 10 с.**Бишек йырҙары. Бармаҡтар менән уйындар. Мөғжизәле бармаҡтар. Һамаҡтар. Йомро-йомро йомғағым, йомғағымда йомағым. Мәкәлдәр- ололар һүҙе. Фәстереүҙәр(уйҙырма). Хикмәтле хикәйә. С.Шарипов.Уйындар.Шаярыуҙар.

**Әкиәттәр донъяһында 11 с.**Беҙ әкиәт тыңлайбыҙ. А.Йәғәфәрова. Әйҙә,әкиәт һөйләшәйек. Ҡарт менән дейеү. Төлкө менән әтәс. Май ҡайҙа?Төлкө менән айыу.Айыухас менән Айыукәс мәктәптә.Борсаҡ өҫтөндәге принцесса. Тауыш ҡайҙа китә?И.Тимерханов.Күгәрсен күҙҙәре. Д.Талхина**.** Ҡарт әсә.Төлкө менән ҡырмыҫҡа.М.Мөсифуллин.Терпе ниңә энәле? А.Ғарифуллина.Етегән йондоҙ.Ай менән Зөһрә.

**Шиғырҙар 7 с.** Туп. Р.Хәйри. Ҡурсағым. Р.Хәйри. Турғай. Ғ.Ғәлиева. Ҡарлуғас. М.Хисмәтуллина. Гөлсәсәк менән күбәләк. Р.Ғәббәсова. Тыуған яҡ. А.Игебаев. Йәй. Д.Талхина. Сентябрь баштары. Н.Мусин. Көҙгө урман. С.Муллабаев. Көҙгө урман.

Дүрт юллыҡ шиғырҙар. Р.Ғарипов, Нияз Сәлимов, Р.Әбүталипова. Өйрәнгән ул әҙергә. А.Игебаев. Хужаһын тапманы. Т Арслан., Д.Юлтый, Н.Нәжми, С.Муллабаев шиғырҙары.

**Беҙ-тәбиғәт балалары. Тәбиғәтте өйрәнәйек, уны һаҡлайыҡ. 13 с**

Урман китабы. Барый Ноғоманов. Ҡарҙағы яҙыуҙар. Ф.Фәтҡуллина. Ҡунаҡ беснәк.М.Кәрим. Терпе ҡунаҡ саҡырған.Әкиәт С.Муллабаев. Урмансы малай. А.Игебаев. Хәстәрлекле сәүкә. С.Кәрим. Ярҙам .С.Кәрим. Һайыҫҡан менән һөйләшеү. Данута Цветич Яңы йыл күстәнәсе. Р.Мөхәмәҙиев. Тыңлауһыҙ сана менән саңғы. Ф.Иҫәнғолов Уртаҡ ҡояш.Ф.Иҫәнғолов. Сәнскеле күлдәк.А.Йәғәфәрова. Бәпембә.Н.Игеҙйәнова. Үгәй инә үләне. Әрем. Кесерткән. В.Исхаков. Айнурҙың дуҫтары. Т.Ғәниева.Томбойоҡтар.

**Кешеләр нисек аралаша?Әҙәп төбө – матур ғәҙәт13 с.**

Ф. Иҫәнғолов. Флүрәнең ғәйебе нимәлә Ф. Фәтҡуллина. Ҡунаҡ табыны,Ф. Иҫәнғолов. Ҡыҙҙар менән уйнарға яраймы. С. Яҡупов. Кем маҡтансыҡ. Н. Фазлыева. Күркә менән Әтәс. А. Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар Г. Яҡупова. Рәхмәт яуғанда А. Йәғәфәрова. Дөйә менән ҡошсоҡ Ф. Иҫәнғолов. «Батыр6ар!» Ж. Кейекбаев. Оморҙаҡ бабай Ф. Фәтҡуллина. Мин – Батыр… Ҡобайырҙар Ҡысҡырып уҡыйым, ваҡытты ҡарайым.Уҡы, сағыштыр С. Михалков. Һөҙөшкөм килә Г. Юнысова. Рәссам

**Беҙ хеҙмәтте, тыуған ерҙе һөйәбеҙ 15 с.**

Г. Ситдиҡова. Сер Г. Яҡупова. Ярғанат Н. Мырҙаҡаева. Иң матур бөжәк Й. Солтанов. Өфө беҙҙең баш ҡалабыҙ М. Садиҡова. Тыуған яҡтарым һәйбәт. М. Кәрим. Бөркөтлө ауылы
Ф. Иҫәнғолов. Ҡайһылай көрәшергә Ә. Ихсан. Әсә рәхмәте. Р. Ниғмәтуллин. Рәхмәттәр биргән рәхәт Г. Ситдиҡова. Күҙлек. Ф. Иҫәнғолов. Һин ни эшләр инең. В. А. Сухомлинский. Поезда А. Ғарифуллина. Көтөлмәгән осрашыу В. Исхаков. Урман дауаһы. Бесәнгә барғанда.

## 3 класс

**Китап – белем шишмәһе 9с.**

Сабир Шәрипов “Йәй бит был, йәй!”.Ноғман Мусин “Бүленгән – бөлөр”. Факиһа Туғыҙбаева “Сәскә телен белеүсе Сәлим”. Фәйрүзә Фәтҡуллина “Кем ғәйепле?”Хәким Хәйретдинов “ Баҫыу һаҡсылары”. Раил Бикбулатов “Һарыбай” Жәлил Кейекбаев “Һунарсы мажаралары”

**Көҙ 9с.**

Динә Талхина “Дуҫтар көҙ ҡаршылай”. Фәүзиә Рәхимғолова “Сәйәхәт” Рәшит Низамов “Шыршыбикә”. Ғ.Ғәлиев Ҡоштарҙың йыйылышы"

**Ололар кәңәше 14 с**

Рәсих Ханнанов “Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан”. Рәсих Ханнанов”Тартай теленән табыр” Рәсих Ханнанов ”Кешегә соҡор ҡаҙыма – үҙең төшөрһөң”. Рамазан Ҡотошов “Кәңәшле эш тарҡалмаҫ”. Кирәй Мәргән “ Дуҫтар һәм дошмандар”. Ҡадир Даян “Өҙөлгән сәскәләр”. Рәшит Солтангәрәев “Кем алданды?”. Агиш Ғифранов “Ҡайын”. Нажиә Игеҙйәнова “Аҡтырнаҡ”. Исмәғил Ғимранов “Берлектә – ҙур байлыҡ”. Йомабикә Ильясова “Сәтләүек ҡыҙ”. Г.Скребицкий “Дуҫлыҡ һуҡмағы”

**Ҡыш 9с.**

Мөкәрәмә Садиҡова “Һунарға барғанда”. Ринат Хәйри “Йәйәүле буран”. Сәрүәр Сурина “Биҙәктәрҙе кем яһаған?”. Шәриф Биҡкол “Урман ситендә”. Сәрүәр Сурина “ Ни өсөн айыу ҡыш көнө йоҡлай?”. Гөлсирә Шафиҡова “Ҡыш ниңә ҡырыҫ холоҡло?”

**Ватан 10 с**

Рәсих Ханнанов “Изге аманат”. Ғайса Хөсәйенов “Тыуған ил ҡайҙан башлана?”. Ғайса Хөсәйенов “Башҡортостан”. Үзбәк Сирбаев “Самат олатай ҡайындары”. Урал. Рауил Бикбаев “Баш ҡалабыҙ – Өфө”. Булат Рафиҡов “Ҡурай”. Тәлғәт Шаһманов “Бабсаҡ бей ырыуы”. Тайфур Сәғитов “Салауатҡа – салауат”. Сафуан Әлибай “Батырға үлем юҡ”. Сәрүәр Сурина “Ере байҙың - теле бай”. Вәзих Исхаҡов “Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы”. Айһылыу Шәйәхмәтова “Икмәк көсө”

**Башҡорт халыҡ әкиәттәре 8 с**

Башҡорт халыҡ әкиәте. Ҡаты-ҡото. Башҡорт халыҡ әкиәте “Васыят”. Айһылыу Йәғәфәрова “Урал иле”. Урал батыр (әкиәттән өҙөк). Башҡорт халыҡ әкиәте .Алпамыша батыр. Башҡорт халыҡ әкиәте .Бойҙай бөртөгө. Башҡорт халыҡ әкиәте .Юлдыбай һунарсы

**Илде иңләп, йәмле яҙ килә 9 с.**

С.Разетдинов “Илде иңләп, йәмле яҙ килә”. Рәкип Сәғәҙиев “Яҙ ҡайҙан килде?” Әнисә Хәмәтдинова “Тамсы менән Тамсыҡай”. Ғилемдәр Рамазанов “Бөйөк Еңеү” Гөлшат Әхмәтҡужина . Мәстүрә әбей.

**4 класс**

**Белем байрамы 1с.** Ф.Рәхимғолова. «Белем байрамы» С.Әлибай. «Ҡояшлы китап» Ф.Ғөбәйҙуллина. «Мәктәбемә»

**М.Ғафури 1с.**

**М.Кәрим. 4 с.** «Беҙҙең өйҙөң йәме»(«Ҡайт инде,атай ҡайт!», «Төш тә,өн дә», «Ҡунаҡ килде», «Бына кем икән ул беҙҙең ҡәҙерле ҡунаҡ») «Шулай башлана йәшәү», «Билдәһеҙ һалдат»

**З.Биишева.4с**. «Ҡояш нимә тине?» «Йәшел йүгән» «Ат һәм күгәүен» «Ҡыш баһадир»

**Д.Бүләков 5с.** «Яңы дуҫ» «Әлфиәнең күҙ йәштәре» «Ҡышҡы сәскәләр» «Томбойоҡ сәскәһе» «Йәшел гармун»

**Я.Хамматов 5с. .**«Салауат» (романдан өҙөк) «Ҡотҡарыу» («Һырдаръя» романынан өҙөк)

**А.Игебаев 1с .** «Һай,тыуған ер,ғәзиз ер!». «Тыуған ер» «Урал» поэмаһынан өҙөк

**Н.Мусин 5с.** «Етемәк болан балаһы» «Ҡарағай башында бер төн» «Татлы тамаҡ һуҫар» «Ҡоралайҙар»

**Ф.Иҫәнғолов 5с.** «Баҫыу уртаһындағы күл» «Өс малай һәм бер йәйен тураһында хикәйә», «Маҙаһыҙ төн” , “Урман патрулдәре”.

**Кәтибә Кинйәбулатова 2с . “**Йәшенле юл”, “Иш янына ҡуш”

**Сафуан Әлибай 2с**. “Ҡышҡы урман”, “Алтын көҙ”,”Урал ҡояшы”, “Тыуған ерем”.

**Фәүзиә Рәхимғолова 4с.”**Ҡолонсаҡ”, “Шифалы һөт”, “Салауат күпере”, “Атай”.

**Факиһа Туғыҙбаева 2с.”**Икмәк”, “Бисмилла”, “Көтөлмәгән буран” .

**Наил Ғәйетбай 2с.**“Аҡбулат батыр” ,”Төнгө осрашыу”.
**Гөлфиә Юнысова 1с. “**Әсәм һүҙҙәре”, “Тыуған ерем”.
**Раил Байбулатов 4с** .”Кугәрсендәр төйәге” ,”Батырлыҡ еле”,“Сәскәләр мажараһы”.
**Рәис Ғабдрахманов 5с**.”Имән тәбәнән сыҡҡан шар” ,”Беҙғолаҡ”,“Ултырма ҡыҙ” , “Капитан”, “Ысын дуҫлыҡ”
**Марс Әхмәтшин4с.“**Бер урман малайҙар” ,”Кәрәҙле бал”, “Гөлйемеш”.
**Фәрзәнә Аҡбулатова 3с** .”Толпар”,“Ҡанатлы була”, “Атай икмәге”.
**Илдус Тимерханов 1с** . “Шишмә”, “Бүре бар”.
**Сөләймән Латипов 1с** , “Ер еләге ерҙә бешә,болан мөгөҙө”
**Лира Яҡшыбаева 1с**.”Кеше һүҙе”, “Аҡтырнаҡ”.
**Донъя әҙәбиәте 5с.**
Мәҫәл, Бишек йыры, Шүрәле. Ғ Туҡай. “Ҡыҙыл башлыҡ”, Ш.Перро, “Бутҡа көршәге”, “Аҡыллы көтөүсе”,” Бер туған Гриммдар”, “Һорауҙар” Дж. Родари, “Аҡҡош”.Ю.Ванаг, “Йәш быуынға”.А Ҡонанбаев, “Йәшлек шишмәһе” ,”Япон халыҡ әкиәте”.

## 5.Баһалау критерийҙары

### Башланғыс класс уkыусыларының белемдәрен баһалау нормалары.

**Телдән яуаптарҙы баһалау:**

Уҡыусыларҙың телдән һөйләмен, уның фонетик, грамматик яғы менән бер рәттән тасуири уҡыуы ла иҫәпкә алына. Телдән һорау формаһында үткәрелә торған күнегеүҙәр һәр дәрестә алып барыла.

**Тыңлап аңлау күнекмәләрен ба3алау:**

1. “тулыһынса аңланы”
2. “өлөшсә аңланы”
3. “аңламаны”

**Уҡыусының монологик һөйләүен баһалау:**

1. - тәҡдим ителгән тема ( рәсем, ситуация) буйынса хикәйә төҙөй белһә;
 - дөрөҫ интонация менән, тулы, эҙмә-эҙлекле итеп, тексҡа баһа биреп, мөнәсәбәтен күрһәтеп һөйләй алһа;
 - тупаҫ булмаған пауза хаталары ебәрелһә лә, **“5”ле** ҡуйыла.
4 -се класта бәйләнешле һөйләү – 10-12 һөйләмдән тәшкил итә.
2. - айырым паузалар, 1-2 һөйләм хатаһы яһаһа;
 - уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ булмаған асыҡлаусы һорау бирелһә,”**4” ле** ҡуйыла
3. - теманың төп йөкмәткеһен асһа;
 - 4-6 һөйләү хатаһы ебәрһә;
 - уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ асыҡлаусы һорау бирелһә йәки уҡытыусы ярҙамынан башҡа йөкткеһен һөйләүҙе башлай(тамамлай) алмаһа, **“3”лө** ҡуйыла.
4. - һөйләгәндә эҙмә-эҙлеклелек һаҡланмаһа;
 - паузаларҙа теүәлһеҙлектәр китһә;
 - 6- нан артыҡ һөйләм хатаһы һәм грамматик хата яһаһа, “**2”ле** ҡуйыла.

**Диалогик һөйләмде баһалау:**

1. - тейешле темпта дөрөҫ интонация менән һорау ҡуйһа;
 - әңгәмәләшенең һорауҙарына тулы яуап ҡайтарһа, “**5”**ле ҡуйыла
2. - дөрөҫ һорау биреп, үҙе лә әңгәмәләшенең һорауына яуап бирһә, ләкин һөйләү ваҡытында уҡытыусы ярҙамына мохтаж булһа;
 - 2-3 һөйләм хатаһы ебәрһә, “**4”** ле ҡуйыла.
3. - уҡытыусы ярҙамында ғына һорау бирһә йәки яуап бирһә;
 - һорауҙар биргәндә, һүҙҙәр һәм грамматик формалар табыуҙа теүәлһеҙлектәр ебәрһә йәки өйрәнгән теманың бер өлөшөн генә үҙләштерһә;
 - 4-5 һөйләм хатаһы ебәрһә, **“3”** лө ҡуйыла.
4. - әңгәмә ваҡытында ҙур ауырлыҡ менән генә һорау бирһә;

- һораузарға үҙ көсө менән яуап бирә алмаһа;
- 6- нан артыҡ хата ебәрһә, “**2**” ле ҡуйыла.

**Уҡыу тиҙлеген тикшереү**

| Баһалар кл | «5» | «4» | «3» | «2» |
|---|---|---|---|---|
| I | 30 | 25 | 15 | 15-тән кәмерәк |
| II | 55 | 45 | 30 | 30-ҙан кәмерәк |
| III | 65 | 55 | 40 | 40-тан кәмерәк |
| IV | 80 | 75 | 55 | 55-тән кәмерәк |

Ҡушымта

## Уҡыу-уҡытыу – методик һәм мәғлүмәти-ресурс тәьмин итеү

**Уҡыу-уҡытыу-методик әҙәбиәт:**

1. Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В., Ғәбитова З.М., Әйүпов Р.Р., Әйүпова В.Б. «Башҡорт теле» 1 класс. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (дәреслек). (яңыртылған баҫма) – Өфө: Китап, 2017. –264 б.
2. Солтанбаева Х. В., Балапанова Л. С. «Башҡорт теле» 2 класс. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (дәреслек)(яңыртылған баҫма) – Өфө: Китап, 2020. – 212 б.
3. Аҙнабаев А. М., Таһирова С. А., Ғәзизуллина М.А. «Башҡорт теле» 3 класс. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (дәреслек) (яңыртылған баҫма) – Өфө: Китап, 2020. – 208 б.
4. Сәмситова Л. Х., Таһирова С.А., Рәхимова Э. Ф., Исламова Т.М. «Башкорт теле» 4 класс. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (дәреслек) (яңыртылған баҫма) – Өфө: Китап, 2020. – 208 б.
5. Псәнчин В. Ш., Пәянчин Ю. В., Игликова А.И., Утәбаева Ф.Ю. «Башкорт теле» 5 класс. Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн (дәреслек) (яңыртылған баҫма) – Өфө: Китап, 2020. – 168 б.

**Уҡыу-уҡытыу ҡулланмалары:**

6. Илмөхәмәтов Ә.Ғ. Хәҙерге заман дәрестәрен проектлау. – Өфө:БР МҮИ, 2015. – 54 б.
7. Сафина Л. Х, Латыпова Р. М., Санъяров Ф. Б.Башҡорт теле. Яңы ҡараш. – Өфө: Мир печати, 2021. – 94 б.

**Һүҙлектәр:**

8. Аҙнағолов Р. Ғ.Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1998. – 368 б.
9. Әхтәмов М. Х. Грамматикһүҙлек. – Өфө: Китап, 2007. −176 б.
10. Әхтәмов М. Х. Халыҡ һынамыштары:Һүҙлек. – Өфө: Китап, 2002. − 160 б.
11. Әхтәмов М. Х. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2008. – 776 б.
12. Әхтәмов М. Х. Омонимдар һүҙлеге. – Өөф: Китап: 2006. – 384 б.
13. Сәмситова Л. Х. Р.Башҡорт мәҙәниәтенең реалияһы: башҡорт теленең эквивалентһыҙ лексикаһы һүҙлеге– Өфө: Китап, 2006. – 214 б.
14. Урағсин З. Ғ. Русса – башҡортса һүҙлек. –Өфө: Китап, 2007. – 278 б.
15. Ураҡсин З. Ғ.Башҡорт теленең синонимдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2008. –163 б.
16. Ураҡсин З. Ғ. Башҡорт теленең фразеологизмдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1996. – 163 б.
17. Усманова М. Ғ., Сәйәхова Л. Г. Башҡортса-руссаһәм русса-башҡортсаһүҙлек.Телмәр өлгөләре. Грамматика. – Өфө: «Эдвис», 2018. – 376 б.
18. Хисамитдинова Ф. Г. и др. Академический словарь башкирского языкаБашҡорт теленең академик һүҙлеге (ун томда). – 5 том. – Өфө: Китап, 2014. – 944 б.

**Методик кәңәштәр:**

19. Аҙнағолов Р. Ғ. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы.Уҡытыу туған (башҡорт) телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1–4 кластары өсөн. – Өфө: Китап, 1996. – 320 б.
20. Ғәбитова З. М. Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластары өсөн “Башҡорт теле” предметы буйынса белем биреү өлгө программалары – Өфө: Китап, 2016. –70 б.
21. Ғәбитова З. М, Солтанбаева Х.В., Аҙнабаев Ә.М., Таһирова С.А., Сәмситова Л.Х., Рәхимова Э.Ф., Псәнчин В.Ш., Псәнчин Ю.В., һ.б.Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 кластары өсөн. «Башҡорт теле» дәреслегенә методик ҡулланма.– Өфө: Китап, 2016. – 535 б.

22. Ғәбитова З. М. Башҡорт теле дәрестәрендә универсаль уҡыу эшмәкәрлеген формалаштырыу. – Өфө: ИРО РБ, 2013. – 36 б.
23. Ғәбитова З. М. и др.Эш программалары төҙөү буйынса методик кәңәштәр. – Өфө, ИРО РБ, 2015. – 52 б.
**Мәғлүмәти ресурстар:**
24. Педагог – эҙләнеүсе сайтында уҡытыуҙа авторлыҡ методикаһы // URL: http://si-sv.com/dir/pedsovet_org/2-1-0-41 (мөрәжәғәт итеү: 22.02.2022).
25. Башҡорт энциклопедияһы // URL: http:www.bashenc.ru (мөрәжәғәт итеү: 12.01.2022).
26. Башҡорт әкиәттәре // URL: http:www.hobobo.ru/catalog (мөрәжәғәт итеү: 13.02.2022).
27. Интерактив башҡорт теле // URL: https://bashlang.ru (мөрәжәғәт итеү: 21.01.2022).
28. Мәктәптә информатика һәм ИКТ. Дәрестә компьютер // URL: http://www.iteach.ru (мөрәжәғәт итеү: 16.12. 2021).
29. Китап һәм балалар// URL: http://www.juja.ru (мөрәжәғәт итеү: 08.03.2022).
30. Ололар һәм балалар өсөн әҙәби журнал. Барыһы ла ғаилә, уҡыусы, абитуриент өсөн // URL: http://www.bibliogid.ru (мөрәжәғәт итеү: 11.02.2022).
31. Башҡортостандың мәҙәни донъяһы // URL: http:ebook.bashnl.ru (мөрәжәғәт итеү: 12.01.2022).
32. Мультимедиялы әкиәттәр // URL: https://kssovushka.ru/zhurnal/10/ (мөрәжәғәт итеү: 11.01.2022).
33. Донъя халыҡтары – сәйәси этнографик белешмә// URL: http://nation.geoman.ru (мөрәжәғәт итеү: 10.03.2022).
34. Уҡыу-уҡытыуҙа информацион-коммуникацион технологияларҙың роле // URL: http://ido.tsu.ru (мөрәжәғәт итеү: 22.10.2021).
35. Интернетта Рәсәй халыҡтарының телдәре// URL: http://www.peoples,org.ru (мөрәжәғәт итеү: 14.02.2022).